# Вести Зианчуринского района в каждый дом

## ИНФОРМАЦИОННЫЙ ЛИСТОК

Декабрь
№3 2020г.

**МОБУ СОШ с.Арсеново**

# 2020 ЙЫЛ – БАШҠОРТ ТЕЛЕ ЙЫЛЫ




Был һанда:


| | |
|---|---|
| 2020 йыл– башҡорт теле йылы. | 1 |
| Р.Ғарипов.Туған тел. | 1 |
| Асыҡ дәрес"Башҡорт халыҡ йыры "Урал" | 1 |
| 14 декабрь– Башҡорт теле көнө. | 2 |
| Һүрәттәр конкурсы“Башҡорт донъяһын- | 2 |
| Берҙәм дәрес “Мәңге йәшә, башҡорт теле!” | 2 |


**2020 йыл** Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы тарафынан **Башкорт теле йылы** тип иғлан ителде һәм был тәкдимде Республика Башлығы Радий Хәбиров хупланы. Һәр айҙа айырым тематик йүнәлештәр билдәләнгән.Ғинуар – ‘**Башкорт теле** – дәүләт **теле**”, февраль – ” **Башкорт теле** – заманса **тел**”, март – ғаилә **теле**, апрель – әсә **теле**, май – ейәүселәр **теле**, июнь – **башкорт теле** – халыҡ **теле**, июль – дуҫлыҡ **теле**, август – юлдаш **теле**, сентябрь – ижад **теле**, октябрь – тарих **теле**, ноябрь – моңло **тел**, декабрь – рух **теле**.






Туған тел. Р.Ғарипов.

Мин халкымдын сәскә күнеленән,
Бал ҡортондай ынйы йыямын.
Йыямын да - йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.
Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер кемдән дә телем кәм түгел.
Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,
Кәм күрер тик уны кәм күңел!..
Халкым теле миңә - хаҡлыҡ теле, -
Унан башка минең илем юк.
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юктың ғына теле юк!
Әсәм теле миңә - сәсән теле,
Унан башка минең халҡым юк,
Йөрәгендә халкы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юк!

*









Иң әүүәл кәрәк нәмә – иман тигән,
Ахирәт эштәренән инан тигән.
"Хоҙай, кисер!" - тигән менән эш бөтмәйҙер,
"Иман шартын" өйрәнмәһә – Иван тигән.










14 декабрь – башҡорт халҡының билдәле мәғрифәтсеһе М.Аҡмулланың тыуған көнө. Башҡортостан Башлығы Указына ярашлы, 14 декабрҙә республикала Башҡорт теле көнө билдәләнде. Уның сиктәрендә бөтә республика буйынса башҡорт телен популярлаштырыу, һаҡлау һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән саралар ойошторолдо. Беҙҙең Арсен дөйөм белем биреү мәктәбендә лә башҡорт теле айлығы “Мин башҡортса һөйләшәм” девизы аҫтында башланып китте.






# Берҙәм дәрес “Мәңге йәшә, башҡорт теле!”

Конкурс рисунков “Башҡорт донъяһында”



“Мәңге йәшә, башҡорт теле!” исеме аҫтында берҙәм дәрес үтте.

Башланғыс класс уҡыусылары, башҡорт телендә йырҙар башҡарҙылыр, йомаҡтар сисеп үҙ-ара көрәштеләр, башҡорт халыҡ уйындары уйнап күңел астылар,Урал батыр эпосы буйынса төшөрөдгән фильм ҡаранылар.

Өлкән класс уҡыусылары викторина һорауҙарына яуап биреп, “Тел бәйгеһе?” уйын-ярышында әүҙем ҡатнаштылар. 7-8 кластарҙа М.Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме "әҫәре буйынса төшөрөлгән"Һеңлекәш" фильмдәре күрһәтелде.

